Әхлаҡ

# ТЫЛСЫМЛЫ ТҮБӘТӘЙ

Илшат ҒӘЛИН

Бер кем өсөн дә сер түгел-дер: түбәтәй - хәтәр үҙенсәлекле баш кейеме ул. Һәр кем, теләһә, быны үҙендә һынап ҡарай ала. Уны кейеп алһаң, нисектер күпкә тыйнаҡлыраҡ булып китәһең, үҙ-үҙеңде йәмһеҙ ғәмәлдәрҙән тыя башлайһың. Ни өсөн шулай икәнен аңлатыуы ҡыйын: әллә кеше һүҙенән оялырға-ҡурҡырға тотнаһың, әллә Аллаһтың Үҙенән.

Әммә бөгөн һүҙем түбәтәйҙең үҙе тураһында түгел, ә был баш кейеме аша башҡаларға нисек дәғүәт ҡылыу (дингә саҡырыу) мөмкин булыуы тураһында. Сағыштырыу өсөн бер миҫал. Ҡыҙыҡ өсөн күҙ һалығыҙ, сиркәүгә ингән урында ҡатын-ҡыҙ нимә эшләй: сиркәүгә килә, ишек алдында башына яулыҡ бәйләй, инеп шәм ҡуя, ә сыҡҡас, яулыкты кире һала. Шуның менән бар ғибәҙәт тамам. Иң ҡыҙыҡлыһы, бөгөн беҙҙең мосолман ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар ҙа шулай итә бит. Ҡатын-ҡыҙҙар тураһында һүҙ икенсе берәй һанда булыр, бөгөн минең йома намаҙы алдынан, йүгерә-йүгерә, юл ыңғайы баштарына түбәтәйҙәрен эләктереп маташып, мәсеткә инеп ултырған, ә мәсеттән сыҡҡас иһә, түбәтәйҙәрҙе кире кеҫәгә һалып ҡуйған ир-егеттәребеҙгә өндәшкем килә. Бер һорау килеп тыуа: ни өсөн шулай кейепсисәләр икән, Әгәр дөрөҫ аңлаһам, күп кенәләре кеше һүҙенән ҡурҡып сисә, нисек тә йәмәғәт урындарында уның тураla иплән кенә шыбырлашмаһындар, насар берәй нәмә уйлап ҡуймаһындар, ә милиционер ағайҙар документ тикшереп йөҙәтмәһен... Йәғни: "Быны мин мәсеттә сакта шундай дөрөҫ, ә урамда мал башкаларҙан бер нимәһе менән дә айырылмайым, үҙемә артыҡ иғтибар ҙа йәлеп итмәйем", йәнәһе. Әммә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәәм: "Һеҙ үҙегеҙҙең мәсеттән тыштағы ҡыланыш-ҡиәфәтегеҙ өсөн яуап тотасаҡһығыҙ", - тип әйтеп ҡалдырған бит, һәм тағы ла: "Кафырҙарға бер нәмәгеҙ менән дә оҡшаш булырға тырышмағыҙ", - тигән.



Күҙ алдығыҙға килтереп ҡарағыҙ әле, йома вәғәзендә түбәтәй кейеп ултырғандарҙың барыһы ла урамда ла шулай түбәтәйҙә йөрөһә! Бер яҡтан, был үҙенә күрә бер модаға әйләнеп китһә, икенсе яҡтан, бүтәндәр алдында көслө генә дәғүәт булыр ине. Беҙ бит нәфис мосолман ҡыҙҙарыбыҙҙы яулыкта йөрөргә саҡырабыҙ, ә ниңә үҙебеҙ түбәтәй кейеп йөрөргә ҡыйынһынабыҙ һуң? Мин әле, ярай, сәллә урап йөрөү тураһында әйтмәйем, бәҙзе берәүҙәрегеҙҙең бөтөнләй тыны ҡыҫыла башлар, тип ҡурҡам.

Булмаһа, түбәтәйҙең ниндәй көслө ләғүәти корал икәнлеген раҫлаған өс хәл һөйләп үтәйем әле.

Йыйындарҙың береһендә имам-хатиб диндән алыҫ булған бер кешегә түбәтәй бүләк иткән ине. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, был ир аварияға эләкте. Ә дауаханала ятҡанында, иҫенә килгәс, әйберҙәре араһынан теге бағыу түбәтәйен табып алып, ҡасандыр уға мулла әйткәндәрҙе иҫенә төшөрөп, был тормош, үҙ йәшәйеше тураһында уйға бата. "Аяҡҡа баҫһам, мәсеткә йөрөй башлаясаҡмын", - тип үҙ-үҙенә һүҙ бирә шул саҡ. Аллаһы Тәғәләнең рәхимлеге менән ул ир һауыкты, хәҙер намаҙ уҡый, мәсеткә лә яҙҙам итә.

Икенсе хәл былай булды. Урам буйлап өс егет китеп бара. Береһе, урамдағы берәүҙең башында түбәтәй күреп ҡалып: "Мин дә түбәтәй һатып алырға уйлап йөрөйөм", - ти. Икенсеһе: "Ә минеке бар ул, өйҙә ята", - ти. Өсөнсөһө, ахыры: "Ә нимәгә ул һеҙгә түбәтәй", - тип һорай. "Мәсеткә кейеп йөрөргә", - тип яуаплайҙар уға. "Ә унда нимә була һуң?" - тип аптырай өсөнсө. Артабан инде һөйләшеү Ислам тураһында дауам итеп китә.

Өсөнсө ваҡиға иһә вокзалда булды. Күмәк халыҡ араһында эскәмйәлә ултырам. Бер мәл алдыбыҙҙан ап-актан кейенгән түбәтәйле йәш егет уҙып китте. Эргәмдә ултырған бер урыҫ ҡатыны минән: "Ул һеҙҙең берәй оло муллағыҙҙыр?" - тип һорай. Мин аңлата башланым. Шулай итеп, һорау артынан һорау биреп, бер мәл был ҡатын Ислам менән ныҡлап ҡыҙыҡһынып китте. Аҙаҡ инде ул: "Минең һәр ваҡыт мәсеткә барғым килә ине, әммә поп беҙгә рөхсәт итмәй ҙә ҡуя, әммә хәҙер мин унда мотлаҡ барып сығасаҡмын", - ти.

Бына шулай. Түбәтәй кейеп йөрөү халыҡта ислам диненә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ, тип әйткәм килә. Бөгөн, халҡыбыҙ көслө дәғүәткә мохтаж ваҡытта, шундай тәү ҡарашка бәләкәй генә мөмкинлектәрҙе лә һис кенә лә күҙ уңынан ыскындырырға ярамайҙыр.

# НАМАҘ УҠЫУҘЫҢ ӘЖЕРЕ

Әүәлге ғалимдар әйткәндәр: бер кеше биш ваҡыт намаҙҙы һәр ваҡыт үтәһә, Аллаһы Тәғәлә ул кешегә биш төрлө яҡшылыҡ бирер. Беренсеһе шулдыр: биш ваҡыт намаҙ уҡыған кешенең ҡәбере киң булыр, ҡыҫмаҫ. Икенсеһе шулдыр: тереклеге, тормошо яҡшы булыр, мохтаж булмаҫ. Өсөнсөһө: ҡәбер ғазабын күрмәҫ, рәхәттә булыр. Дүртенсеһе: сират күперенән йәшен кеүек тиҙ үтер. Бишенсеһе: ожмахҡа хисапһыҙ (йәғни иҫәп-хисап бирмәйенсә) һәм ғазапһыҙ керер.

Әгәр берәү биш ваҡыт намаҙҙы уҡымаһа, Аллаһ Тәбәрәкә вә Тәғәлә ул кешегә ун ике төрлө яуызлыҡ бирер. Өсөһө донъяла булыр, өсөһө - йән биргәс, өсөһө - ҡәберҙә, өсөһө - үлгәндән һуң терелгәс, ҡиәмәт көнөндә булыр. Донъяла булған яуызлыктарҙың әүәлгеһе шулдыр: был кешенең кәсебенән бәрәкәте булмаҫ, мохтаж булыр. Икенсеһе шулдыр: был кешене яҡшы әҙәмдәр дуҫ итмәҫ Өсөнсөһө шул: дошманы күп булыр.

Йән биргәндә булған өс тарлыктың әүәлгеһе шулдыр: йән биргән ваҡытта ҡарыны ас булыр, донъяла булған ниғмәттәрҙең барыһын ашаһа ла туймаҫлыҡ булыр. Икенсеһе шулдыр: йән биргәндә бик һыуһар, бөтөн донъяла булған һыуҙарҙы эсһә лә туймаҫтай булыр. Шул заман шайтан бер һауыт менән һалҡын һыу алып килер, был бәндә ул һыуҙы шайтандан һорар. Шайтан әйтер:

- Әгәр иманһыҙ булһаң, һыуҙы бирермен, - тип. (Аллаһ һаҡлаһын!) Күп кешеләр шайтандың һүҙенә ғәмәл ҡылып донъянан китерҙәр. Өсөнсөһө шулдыр: Ғазраил ғәләйһиссәләм йәнен ҡатылыҡ менән алыр - һыуланған (еүеш) йөндән дегәнәкте алғандай булыр. Был кешенең йән биргән ваҡытта рәнйүе мең мәртәбә ҡылыс менән сәнсекәндән дә артығыраҡ булыр.

Ҡәберҙә булған өс ҡатылыктың әүәлгеһе шулдыр: Мөнкир менән Нәкир ҡурҡытып һәм ҡатылыҡ менән һорарҙар. Икенсеһе шулдыр: ҡәбере ҡараңғы булыр һәм ҡәбере шул ҡәҙәр ҡыҫыр, хатта ҡабырғалары аралашыр.

Ҡиәмәт көнөндәге өс ҡатылыҡтың әүәлгеһе: хәле бик ауыр булыр, Аллаһ Тәғәлә был кешегә бик асыуланыр, Аллаһ Тәғәлә был кешене тамуҡта ғазап ҡылыр.

Һәм әгәр берәй ҡаланың, йә бер ауылдың, йә бер өйҙең әһелдәре намаҙ уҡымаһалар һәм йәмәғәт намаҙына бармаһалар, Аллаһ Тәғәлә уларға шайтандарҙы иреклә ҡылыр: ул кешеләр менән бергә ашарҙар, бергә түшәккә ятырҙар, бергә ҡатындары менән яҡынлыҡ ҡылырҙар.

Намаҙҙы ташлауҙа шуның ҡәҙәр ҡурҡыныстар, кәмселектәр бар, шуға күрә лә һәр ҡайһыбыҙға биш ваҡыт намаҙҙы уҡыу фарыҙдыр. Биш ваҡыт намаҙ уҡыу аға торған һыуҙа биш мәртәбә ҡойоноп сыҡыуға оҡшағандыр. Әгәр бер кеше ағым һыуҙа һәр көндә биш мәртәбә ғөсөл ҡойонһа, тәнендә һис кере һәм ҡаралығы ҡалмаҫ. Шуның кеүек, бер кеше биш ваҡыт намаҙ уҡыһа, барса гонаһтары ярлыҡаныр, яңы тыуған бала кеүек булыр. Һәм әгәр бер кеше биш ваҡыт намаҙ өсөн яҡшы пак һыу менән тәһәрәт алһа, барса гонаһтарынан арыныр. Йөҙөн йыуһа, күҙе менән ҡылған гонаһтары ярлыҡаныр, ҡулын йыуһа, гонаһтары бармаҡ остарынан китер. Әгәр башын һыпырһа, ҡолағы менән ишеткән гонаһтары ярлыҡаныр, ике аяғын йыуһа, аяғы менән ҡылған гонаһтары ярлыҡаныр.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әйткән: "Бер кеше камил тәһәрәттән һуң "Әшһәду ән лә иләһә илләллаһ, үә әшһәду әннә Мөхәммәдән ғабдүһү үә рәсүлүһ" тип әйтһә, ул кешегә һигеҙ ожмах ишектәре асылыр, Ҡиәмәт көнөндә теләгән ишегенән керер.

**"Башҡортостан дин календарь" китабынан алынды.**

Абай бул!

# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ



**Шайтан - һуғышсан һәм агрессив йән эйәһе:**

Кешегә булған көнләшеүе һәм нәфрәте уны кешеләргә ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барырға мәжбүр итә. Ул Аллаһы Тәғәләнән кешенең юлына ҡапҡандар һәм тоҙаҡтар ҡорорға рөхсәт һораған һәм Аллаһтың хикмәте менән уға рөхсәт бирелгән. Шул ваҡыт шайтан ҙур көс һалып һәм һиҙгер аҡылын ҡулланып, кешене хаҡ юлдан сығарыр һәм иманһыҙлыҡҡа төшерер өсөн уның артынан туктауһыҙ күҙәтә башлаған:

"Аллаһ бойорҙо: "Кит бынан! Мин һине (ләғнәт ебәреп) ҡыуам! Хаҡтыр, һин Ҡиәмәт көнөнә саҡлы ләғнәтләнгән килеш ҡалырһың". "Раббым, - тине Иблис. - Бөтөн кешеләр яңынан терелгәненә саҡлы (яҙамды кисектер) форсат бир миңә". Аллаһ әйтте: "Ысындан да, һин кисектерелгәндәрҙең береһе. Мәғлүм бер ваҡытта саҡлы". Иблис әйтте: "Раббым, мине тура юлдан яҙҙырғаныңа күрә, мин дә Ер йөҙөндәгеләргә гонаһтарын ләззәтле һәм гүзәл ғәмәл итеп күрһәтермен һәм юлдан яҙҙырырмын".

***Шайтан бик тәккәббер:***

"Һәм беҙ фәрештәләргә: "Әҙәмде хөрмәтләп сәждә итегеҙ", - тип әйттек. Иблистән башҡа барса фәрештәләр ҙә сәждә итте. Ул (әмеремдән) йөҙ сөйөрҙө. Тәккәбберлеген еңә алманы, (тәккәбберлеге арҡаһында) ул ышанмаусы кафырҙарҙан ине".

Шайтан фәкирлек һәм хәйерселек менән ҡурҡыта, гонаһ ҡылыуға әтәрә:

"Шайтан һеҙгә фәкирлек вәғәҙә итә, һәм боҙоклоҡҡа бойора".

Шайтан Бөйөк Аллаһы Тәғәлә тураһында бәхәсләшергә саҡыра:

"Кешеләр араһында наҙан килеш Аллаһ хаҡында бәхәсләшергә әүәҫ кешеләр бар. Улар - аҙғын шайтанға эйәргән кешеләр".

***Шайтан мосолмандарҙы талаштырырға тырыша:***

"Ҡолдарыма әйт, иң татлы һүҙҙәр генә һөйләһендәр. Юғиһә шайтан улар араһында ғауға сығарыусы. Шайтан кешенең иң хәтәр дошманы".

"Шайтан минең һәм туғандарым араһында дошманлыҡ ҡылғандан һуң..."

Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм): "Шайтан Ғәрәп ярым утрауында йәшәгән намаҙ уҡыусылар уның артынан китеренә өмөтөн юғалтҡан. Әммә улар араһында дошманлыҡ тыуҙырыуына өмөтләнә", - тип әйткән.

***Шайтан малын әрәм-шәрәм итеүселәрҙең ҡәрҙәше:***

"Малын әрәм-шәрәм итеүселәр - шайтандың ҡәрҙәше". Әгәр кеше малын әрәм-шәрәм итә икән, был эштә уға шайтан иш булыр.

Шайтан әйберҙәрҙең исемен юрый үҙгәртә һәм аҙаштыра:

"Шайтан уны вәсвәсәгә һалды: "Йә, Әҙәм, - тине. - Һиңә мәңгелек ағасын һәм икһеҙ-сикһеҙ хакимлыкты күрһәтәйемме?" Иблис ябай бер ағасты мәңгелек ағасы тип атаған.

**Мөхйиддин бин ҒӘРӘБИ**
***"Шайтан хәйләләре" китабынан.***